*Салауат ГАЛИН,*
*филология фәндәре докторы, профессор*

# ИРӘНДЕК МОҢДАРЫ



Ер-һыу, тәбиғәт ҡайҙа ла үҙенсә матур. Шулай ҙа, минеңсә, һәр ерҙең, һәр төйәктең үҙ хозурлығы, үҙ күркәмлеге. Баймаҡ яҡтарының да борон-борондан риүәйәттәрҙә данланған, йырҙарҙа йырланған үҙ матурлығы бар. Был матурлыҡты ҡаяларында бөркөттәр сыңлаған Ирәндектән, аҡ томанға төрөнгән туғайҙарында һандуғастар моң сәскән Һаҡмарҙан, икһеҙ-сикһеҙ иген баҫыуҙарынан тыш күҙ алдында килтереү мөмкин түгел.

Һәр төбәктең үҙ тарихы, үҙ йыры, үҙ моңо була. Борон-борондан бөрйән ырыуы йәшәгән Баймаҡ яҡтарының да әле 1557 йылда уҡ Иван Грозный исеменән уның вәзирҙәре ҡулынан ер-һыуҙарына грамота алып ҡайтҡан ырыу башлығы Иҫке-бей, 1695 йылда Азов походында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн Петр батша ҡулынан тарханлыҡ грамотаһы һәм алтын һаплы хәнйәр менән бүләкләнгән, һуңғараҡ, 1705-1771 йылдарҙа, башҡорт восстаниеһының етәксеһе булған атаҡлы Алдар батыр заманынан килгән шанлы тарихы бар.

Ә инде Ирәндек итәктәрендә, Һаҡмар буйҙарында тыуған көй-моңдоң иҫәп-хисабына сыҡҡан кеше бар микән?! «Иртәнсәкәй тороп, ай, ҡараһам, саңҡ-саңҡ итә Ирәндек бөркөтө», «Ирәндектең Ҡараташы — күк бүренең ояһы», «Һаҡмар ғына буйы, ай, һары тал»... Күпме йыр, күпме моң сығарылған был яҡтарҙа! «Сибай» һәм «Буранбай», «Ирәндек» һәм «Абдрахман», «Ғилмияза» һәм «Төйәләҫ» кеүек мәшһүр йырҙарҙы кем генә белмәй ҙә, кем генә йырламай! Яҡташтарыбыҙҙан атаҡлы композитор, РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөсәйен Әхмәтов, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғата Сөләймәнов, уҡытыусы Кәрим Дияров үҙҙәре генә лә был төбәктә меңдән ашыу йыр-көй яҙып алғандар. Минең үҙемә лә тыуған яҡтарымда бынамын тигән һүҙ оҫталары, йырсы, ҡурайсылар менән осрашырға, йөҙәрләгән йыр яҙып алырға насип булды. Үҙем бала саҡтан белеп-күреп үҫкән Арыҫланов Абдрахман, Мусин Фәйзрахман, Мәхмүтов Фазулла, Әхмәтов Хажый, Рыҫбаев Әнүәр кеүек ҡурайсы һәм йырсыларҙың йыр-моңо әле лә ҡолаҡ төбөмдә сыңлаған кеүек.

Ирәндек һәм Һаҡмар буйҙарының ифрат бай йыр мираҫы элек-электән оло-оло ғалим, яҙыусыларҙың иғтибарын йәлеп итә килгән. Шундай кешеләрҙең береһе — атаҡлы ғалим, академик И.И.Лепехин. Ул 1768-1772 йылдарҙа Рәсәйҙең күп кенә төбәктәрен урап сыҡҡан кеше. 1770 йылдың майиюнь айҙарында, мәҫәлән, ул Башҡортостан буйлап сәйәхәт иткән, Ағиҙел, Егән, Һәләүек, Нөгөш, Эйек, Ҡана, Һаҡмар буйҙарындағы йөҙәрләгән йәйләүҙәр аша үткән. Уның дүрт томдан торған «Дневные записки путешествия» исемле хеҙмәтенең икенсе томында Башҡортостандың тәбиғәте, ҡош-ҡорто, йәнлектәре, ер-һыу, урмандары, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәт, йолалары, ауыҙ-тел ижады хаҡында ифрат бай материал һибелеп ята. Ошо яҙмаларҙан күренеүенсә, шул уҡ 1770 йылдың июнь башында И.И.Лепехин Ҡыҙыл Мәсет (хәҙерге Мораҡ), Ҡана заводы аша килеп бер аҙна самаһы Ирәндек буйҙарында йәшәгән, Талҡаҫ күленә килеп ял иткән. Шуны ла әйтергә кәрәк, 1775 йылда башҡорттарға ҡарата ҡанһыҙлығы һәм ҡатынҡыҙҙарҙы мәсхәрәләгәне өсөн Талҡаҫ буйында рус промышленнигы Брагин үлтерелә. И.Лепехиндың яҙыуынса, уны Сураш Мәргән исемле батыр уҡ менән атып күлгә батыра. Бына шуға күрә лә ғалим Талҡаҫ, Ирәндек буйҙарына ҡурҡа-ҡурҡа ғына килә. «Брагин арҡаһында бөрйәнлеләрҙән ҡурҡыуыбыҙ бушҡа ғына булды», — ти И.Лепехин. Ул үҙе лә көтмәгәнсә, башҡорттар ғалимды ололап ҡаршы ала. Башта ул Таулыҡай старшина йәйләүендә ҡунаҡ була, унан инде Күркәтау буйында йәйләп ятҡан Төркмән старшина йәйләүенә күсә. Ул иһә И.Лепехинға айырыуса ҙур хеҙмәт күрһәтә. Уның хөрмәтенә старшина бөтә ырыу батырҙарын, йырсы-ҡурайсыларҙы йыйып оло мәжлес — бәйге, көрәш, төрлө милли уйындар ойоштора. И.Лепехин алтмыш йәштәрҙәге бер йырсыны бик яратып тыңлауы хаҡында айырыуса кинәнеп яҙа. Ул үҙенең ата-бабаларының данлы эштәре хаҡында йырланы, — ти ул. — Башҡорттар уларҙы батырҙар тип хәтерләйҙәр. Алдар, Ҡараһаҡал, Килмәт, Күсем кеүек батырҙар тураһындағы йырҙар айырыуса киң таралған ине. Йырсы улар тураһында йырлап ҡына ҡалманы, ә тауышы һәм тән хәрәкәттәре менән батырҙың эшләгән эштәрен — нисек итеп иптәштәрен өгөтләгәндәрен, нисек итеп яуға ингәндәрен, дошмандарын үлтергәндәрен, яраланып, хәлһеҙләнә барыуҙарын һәм үлеп ҡалыуҙарын һынландырҙы. Быларҙың барыһын да йырсы ҡарт шул тиклем оҫта итеп башҡарҙы, хатта күптәр иланы. Шунан инде ҡайғы-хәсрәт моңо ҡапыл шатлыҡ менән алмашынды: йырсы йылмайған төҫ менән «Ҡара юрға» тигән йырҙы йырлап ебәрҙе».

Ирәндек буйы йырҙарының тәү башлап ташҡа баҫылып сығыуы декабрист шағир П.М.Кудряшев (1797-1827) исеме менән бәйле. Ул үҙе Верхнеуральск ҡаласығында тыуып үҫкән, шунда уҡ хәрби училище тамамлағас, Ырымбур гарнизонында хеҙмәт иткән. П.М.Кудряшев Ырымбурҙағы йәшәрен ойошмаға етәкселек итә, уның программа документтарын әҙерләй. Петербургта декабристар восстаниеһы баҫтырылғандан һуң ҡулға алына. Үпкә ауырыуынан үлеп ҡалыуы ғына уны дар ағасынан ҡотолдороп ҡала. П.М.Кудряшев башҡорт, ҡаҙаҡ телдәрен яҡшылап өйрәнә һәм сәфәр йөрөгән саҡтарында башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып алыу менән шөғөлләнә һәм уларҙы руссаға ирекле тәржемә итеп, быуаттың егерменсе йылдарында Мәскәүҙәге «Вестник Европы» журналында баҫтырып сығара. Улар араһында башҡорт атлыларының 1812 йылғы француз яуында ҡатнашыуы хаҡында хикәйәләгән «Башҡорттоң һөйгәне менән хушлашыуы», «Башҡорттоң яу алдынан йырлаған йыры», «Башҡорттоң яу һуңынан йырлаған йыры» кеүек йырҙар айырыуса әһәмиәтле, сөнки улар беҙҙең көндәргәсә тик П.М.Кудряшев яҙмаларында ғына һаҡланып ҡалған.

Уның 1824 йылда «Отечественные записки» журналының редакторы П.П.Свиньин тигән бер кешегә яҙған хатынан күренеүенсә, был йырҙар 1821 йылда хәҙерге Иҫке Сибай ауылының бер уҡымышлыһынан яҙып алынған булған. Ошо уҡ хатында П.М.Кудряшев журналға йырҙар, әкиәттәр ебәрергә вәғәҙә итә. Әлегә ул материалдарҙың яҙмышы беҙгә билдәле түгел. «Әгәр ҙә һеҙ башҡорттарҙың тормошон өйрәнергә ниәтләһәгеҙ, — ти П.М.Кудряшев, — быны ярым күсмә тормош менән йәшәгән Сибай ауылынан башҡа бер ерҙә лә эшләй

алмаçһығыҙ. Ваҡытығыҙҙы йәлләмәһәгеҙ, был ауылда бер нисә көн йәшәй алаһығыҙ. Бында һеҙ башҡорттарҙың башҡа яҡтарҙа осрамаған йолаларын, ышаныуҙарын, тормош-көнкүрешен күрерһегеҙ».

Ирәндек һәм Һаҡмар буйҙарының йыр-моңон өйрәнеүҙә С.Г.Рыбаков (1867-1921) айырыуса ҙур хеҙмәт күрһәтте. Уның 1897 йылда Петербургта баçылып сыҡҡан «Музыка и песни уральских мусульман» исемле китабы әле булһа башҡорт халыҡ йырҙары тупланған мөһим сығанаҡ булып һанала. Китапта С.Г.Рыбаков 1892, 1894 йылдарҙа хәҙерге Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ райондарында яҙып алған ике йөҙҙән ашыу йыр һәм көй туплаған.

С.Г.Рыбаков — хәҙерге Баймаҡ районын арҡырыға ла, буйға ла урап сыҡҡан кеше. Уның китабында, мәçәлән, Күсей, Тоҡтағол, Темәс, Икенсе Этҡол, Байым, Беренсе Этҡол, Юлыҡ ауылдарында, Рәмиев, Солтанов, Ғәҙелша алтын приискыларында яҙып алынған йөҙҙән ашыу йыр бар. Ғөмүмән, С.Г.Рыбаков йырҙарҙы бик юғары баһалаған. «Һәр бер башҡорт күңеле менән шағир, башҡорттарҙың һәр бер быуыны үҙенең йыр репертуарын ижад итә», — тигән ул. С.Г.Рыбаков үҙҙәрендә шағирлыҡ һәм композиторлыҡ һәләте булған йырсы һәм ҡурайсылар менән һоҡланған. Икенсе Этҡол ауылында, мәçәлән, ул Толомғужа Ғөбәйҙуллиндан легенда-тарихтары менән «Буранбай», «Ишбирҙин», «Мәхтәсүп», «Һары сәс», «Киленсәк», «Бүртә ат», Күсей ауылында Биргәле исемле ҡурайсынан «Байыҡ», «Салковский», «Бейеш», «Манеж», «Ҡасим түрә», «Юлтый ҡараҡ», «Сыңрау торна», «Ҡара юрға», Рәмиевтар приискыһында Үҙәнбаев тигән ҡурайсынан «Абдрахман», «Ғилмияза», «Әрме», «Ынйыҡай», Беренсе Этҡол ауылында Юлыев старшинанан «Сибай», «Буранбай», «Бәхтиәр», «Бүртә ат», Юлыҡ ауылында баҙарға килеүселәрҙән «Ашҡаҙар», «Шаһибәрәк», «Ырымбур» кеүек тистәләгән йыр һәм көй яҙып ала.

И.И.Лепехин юлъяҙмаларында һәм С.Г. Рыбаков китабында башҡорттарҙағы өҙләү һәм ҡош булып һайрау тураһында мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Төркмән старшина йәйләүендәге мәжлесте тасуирлап, ул, мәçәлән, былай тип яҙған: «Башҡорттар үҙҙәренең тауыштарын йәнлектәр һәм төрлө ҡоштар тауышына оҡшатып күрһәттеләр һәм быны шундай оçта итеп башҡарҙылар, хатта ысын ҡош тауышын башҡорт тауышынан айырыуы ҡыйын ине».

Бындай оçта кешеләр С.Г.Рыбаковҡа ла осраған. Юлыҡ ауылында, мәçәлән, уның янына бер башҡорт килә һәм үҙенең һөнәрен күрһәтә: ҡош булып һайрай, өҙләп тә күрһәтә. «Йырсы тамаҡ төбө менән шаҡтай ҡырағай һәм моңрәгән характерҙағы бер тон сығарҙы, —тип яҙа ул был хаҡта, — ошо тон фонында ул, үҙенең әйтеүенә ҡарағанда, бәләкәй тел ярҙамында, башҡорт көйҙәрен уйнаны. Тауыштар әкрен, әммә анлайышлы, асыҡ һәм яғымлы сыға ине». Ҡыҙғаныçҡа ҡаршы, был йырсының исеме С.Г.Рыбаков китабында бирелмәгән: улар тағы бер осрашырға һүҙ ҡуйышалар, әммә йырсы ауылына ҡайтып китә.

С.Г.Рыбаков ҙур ҡыҙыҡһыныу менән Темәс ауылында йәшәүсе Мансур тигән йырсы хаҡында яҙа. Ул төрлө ҡош-ҡорт тауыштары сығара белеүсе оçта булған һәм үҙенең оçталығын С.Г.Рыбаковҡа аҡҡош булып тауыш сығарып күрһәткән. «Был тауыштар, — ти С.Г.Рыбаков, — ысынлап та аҡҡоштоҡона оҡшаған, шул уҡ ваҡытта ошо фонда көй асыҡ ишетелә ине. Был аҡҡош ҡаңғылдауын рәхәтләнеп тыңлайһың: ул шундай оçта башҡарылған яғымлы нәмә. Шунан һуң йырсы күгәрсендең нисек гөрләүен, унан ниндәйҙер бер ҡыр ҡошоноң, биҙгәләктең булһа кәрәк, нисек һайрауын һүрәтләндерҙе, һәм былар бөтәһе лә бик үҙенсәлекле һәм ысынға оҡшағайны». Мансур төрлө ҡоштар тауышын сығарыусы шундай оçта булған, хатта урамда осраған кешеләрҙең сәләменә лә һүҙ менән түгел, ә ҡош булып һайрап ҡына яуап биргән. С.Г.Рыбаков Темәс ауылында туҡтаған йорт янына килеп ул төндәр буйы ҡош булып һайрап ултырыр булған. Былар барыһы ла С.Г.Рыбаковҡа башҡорт халҡының поэтик һәләтен юғары баһаларға, йырҙарҙың моңлолоғо менән һоҡланырға мөмкинлек биргән.

Эйе, Ирәндек, Һаҡмар буйҙары — йырлы төйәк, илһам төйәге. Был төбәктә мәшһүр шағир Шәйехзада Бабич ижады сәскә атҡан. Ул 1919 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре-

нең Темәстә булып үткән I съезында секретарлыҡ вазифаһын башҡара, ғәскәр менән бергә ҡыҙылдар яғына күсә. Уның «Башҡорт халҡына көйлө хитап» исемле атаҡлы шиғыры тап ана шул Темәстә яҙыла һәм листовка рәүешендә баҫылып сыға. Беҙҙең яҡтарҙа булған сағында Ш.Бабич легенда-тарихтары менән тиҫтәләгән башҡорт халыҡ йырҙарын яҙып ала. Улар араһында «Буранбай», «Сибай кантон», «Бала ҡарға» кеүек Ирәндек буйы йырҙары бар. Ш.Бабич үҙе лә халыҡ йыры, халыҡ моңо менән илһамланып ижад иткән әҙиптәрҙең береһе.

Ирәндек буйы моңдарының күпләп яҙып алыныуы, өйрәнелеүе, баҫып сығарылыуы совет осоронда айырыуса йәнләнеп китте. И.Лепехин һәм П.Кудряшев, Р.Игнатьев һәм С.Рыбаковтарға алмашҡа Хөсәйен Әхмәтов һәм Рәүеф Мортазин, Ғата Сөләймәнов һәм Кәрим Дияров, Юлай Ғәйнетдинов һәм Ришат Рәхимов кеүек шул яҡтарҙың йыр-моңон тәпәй баҫҡан саҡтан күңелдәренә һеңдереп үҫкән, шул моңға мөкиббән ғашиҡ булған остаздар килде. Был моң уларҙың китаптарында, радио, телевидение тапшырыуҙарында халҡыбыҙҙың күңелен тетрәтә лә, елкендерә лә. Был китаптарҙы һанап сығыу үҙе генә лә был ҙур булмаған мәҡәләнең әллә ни хәтле урынын алған булыр ине. Әле мин уларҙың тик берәүһе — Кәрим Дияровтың «Сал Уралдың моңдары» (Өфө: «Китап», 1998) китабын ғына иҫкә алып китмәксемен. Кәрим Дияров үҙе тыуыпүҫкән Ирәндек төйәгенең йөҙәрләгән йырын, көйөн күңелендә йөрөткән киң йөрәкле моң эйәһе. Был осраҡта шуны ғына әйтеү ҙә етә: Башҡортостан Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында уның башҡарыуында тарихы менән яҙып алынған 120-нән ашыу йыр һәм көйҙөң яҙмалары һаҡлана. Хәҙер инде улар рухи байлығыбыҙҙың айырылғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил итә. Был моңдарҙы беҙ Хөсәйен Әхмәтов операларында һәм йырҙарында, Рәүеф Мортазин симфонияларында, Батыр Вәлид, Сәләх Кулибай, Хөсәйен Ҡунаҡбай, Нәжиб Иҙелбаев, Абдулхаҡ Игебаев шиғырҙарында һәм поэмаларында ишетәбеҙ. Йомабай Иҫәнбаев, Ғиниәт Ушанов, Ғата Сөләймәнов, Сөйөмбикә Кулибаева, Рамаҙан Йәнбәков, Ришат Рәхимов, Юлай Ғәйнетдинов кеүек йырсы һәм ҡурайсыларҙың да, Мөхәмәт Иҙрисов һәм Рәшиҙә Туйсина һымаҡ данлыҡлы бейеүселәрҙең дә тыуып-үҫкән төйәге күк Ирәндек тармаҡтарында, Һаҡмар буйҙарында булыр.

Элек-электән рус ғалимдарын, сәйәхәтселәрен таң ҡалдырған башҡорт йыры хәҙер Ер шарының барлыҡ ҡитғаларында яңғырай. Уны Париж һәм Берлин, Нью-Йорк һәм Вашингтон, Бухарест һәм Варшава, Мадрид һәм Рим, Вена һәм Хельсинки, Улан-Батор һәм София, Дели һәм Дамаск, Ханой һәм Пхеньян, Ҡаһирә һәм Ҡабул тамашасылары ишетеп белә. Шулай ҙа һөйләйҙәр: 1925 йылда яҡташыбыҙ, легендар ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев Парижда сығыш яһаған. Французлар ябай ғына бер үләндән шул ҡәҙәре моң сығыуына ышаныр-ышанмаҫ хайран ҡалған, ти. Бер ханым, был ниндәй хикмәт, был ниндәй музыка ҡоралы, тип, ышанмайынса сәхнәгә сығып хатта Йомабай Иҫәнбаевтың ауыҙын асып ҡараған, ти. Шул саҡ ҡурайсы сәхнәгә Ирәндек буйынан тупрағы менән ҡаҙып алып килтерелгән бер ҡурай алып сыҡҡан һәм шунда уҡ унан ҡурай яһап, залды яңғыратып тағы ла уйнап ебәргән, ти. Был инде Париж өсөн ишетелмәгән мөғжизә була. Ә теге ханым бармағындағы ҡиммәтле йөҙөгөн һурып алып Йомабай Иҫәнбаевтың бармағына кейҙергән. Бына бит ул көй-моң, Ирәндек моңо, ниндәй ҡөҙрәтле көскә эйә.

Һуңғы йылдарҙа Сибай ҡалаһында «Ирәндек моңдары» исемле йыр байрамы — фестиваль үткәрелеп килә. Унда яңынан-яңы көйҙәр, яңынан-яңы йырсы, ҡурайсылар асыла. Тимәк, Ирәндек моңо һүнмәй ҙә, һүрелмәй ҙә, ул — халыҡ күңелендә.